# Силәбе өлкәһе — Челябинская область

*29 июня 2001 года состоялся II курултай башкир Челябинской области. В числе делегатов курултая были люди разных профессий: ученые, преподаватели, врачи, производственники, работники культуры и торговли, студенты и молодежь. В работе курултая принимали участие многочисленные гости: губернатор Челябинской области П.И.Сумин, заместитель Премьер-министра РБ Х.Х.Ишмуратов, председатель Исполкома Всемирного курултая башкир Н.А.Мажитов, руководители ряда министерств и ведомств РБ, председатели исполкомов курултаев башкир из Перми, Свердловска, Оренбурга, Кургана, а также руководители местных общественных организаций и национальных культурных центров Челябинской области. Участие в курултае представителей других национальностей подтверждает важность данного мероприятия, содействует укреплению межнациональных отношений и дружбы народов.*

*Первый областной курултай прошел в декабре 1997 года, на котором и был избран исполком из 23 человек. За последние 4 года были созданы 32 районных и городских курултая, в т.ч. Челябинский городской курултай.*

*В настоящее время подписан двусторонний договор между Челябинской областью и Республикой Башкортостан в области экономики, науки, образования и культуры. Такой же договор подписан и с городом Магнитогорском. На II областной курултай башкир было избрано 300 делегатов, присутствовали — 286.*

*Делегаты областного курултая приняли конструктивные решения и обращения, которые будут способствовать возрождению и развитию башкирского народа.*

*Сәлимйән* БӘҘРЕТДИНОВ

## ҠОТ КИЛТЕРҺЕН ЕРГӘ ҠОРОЛТАЙ!

Силәбе өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайында, был мәртәбәле оло йыйында Силәбе өлкәһе губернаторы П.И. Сумин, Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Х.Х. Ишморатов, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.А. Мәжитов, Фән, юғары һәм профессиональ белем биреү буйынса республика дәүләт комитеты рәйесе Р.Ғ. Бүкәнова, халыҡ мәғарифы министры Ғ.М. Мөхәмәтйәнова, мәҙәниәт (хәҙер мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт) министрының беренсе урынбаҫары Г.С. Моратова, яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Р.Т.Бикбаев, фән докторҙары Ф.Ғ. Хисаметдинова, Д.Ж. Вәлиев, Ырымбур, Пермь, Свердловск, Ҡурған өлкәләре башҡорттары ҡоролтайҙары вәкилдәре һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты.



10-2001.p65 51 02.11.01, 13:36

Ҡоролтай ҡурай моңо, башҡорт халҡының гимны «Урал» менән башланды. Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренең мөфтөйө Ғабдулла Шаҡаев изге йыйынға фатихаһын бирҙе. Хөкүмәт, Закондар сығарыу йыйылышы, күп милләтле Силәбе халҡы исеменән ҡоролтай делегаттарын һәм ҡунаҡтарын Силәбе өлкәһе губернаторы Петр Иванович Сумин тәбрикләне. Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов иһә Башҡортостан Президенты М.Ғ. Рәхимовтың ҡотлауын уҡып ишеттереп, губернаторға иҫтәлекле бүләк — затлы уҡ-һаҙаҡ тапшырҙы. Уны ихлас ҡабул итеп, П.И. Сумин: «Беҙ Башҡортостандан, уның Президентынан өйрәнеп, бергә эшләйәсәкбеҙ», — тип, Силәбе өлкәһе тураһында төҫлө китап бүләк итте.

— Беҙ әле Көньяҡ Уралда милли үҫештең актуаль мәсьәләләре тураһында етди һөйләшеүгә йыйылдыҡ, — тине П.И. Сумин. — Бөгөнгө вәкәләтле форум Урал регионында милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыуға яңы импульс бирәсәк.

Силәбе өлкәһендә 111 милләт йәшәй. Халыҡ һаны буйынса төрки телләр икенсе урында тора. Башҡорттар иһә 200 мең кеше тәшкил итә. Силәбе өлкәһенең милли мәсьәләләр буйынса төбәк концепцияһы ҡабул ителгән. Уның бер йүнәлеше — милли үҙенсәлектәрҙе һаҡлау. Сөнки халыҡтың рухын һаҡлау — уның йолаларын, мәҙәниәтен, телен һаҡлау ул. Ошо мәсьәлә П.И. Суминдың, Х.Х. Ишморатовтың сығыштарында, Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Т.Ғ. Хәйеровтың отчет докладында ла киң яҡтыртылды.

Ҡоролтайҙың һөҙөмтәле эшмәкәрлеге Башҡортостан Республикаһы менән Силәбе өлкәһе араһындағы «Дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында»ғы килешеүгә ярашлы ғәмәлгә ашырыла. Губернатор П.И.Сумин «Рәсәйҙең төрки халыҡтарын тергеҙеү һәм үҫтереү» федераль программаһы нигеҙендә ҡала һәм район ҡоролтайҙарын үткәреүгә булышлыҡ күрһәтеү тураһында ҡарар сығарған. Ҡоролтайҙарҙа башҡорттарҙың тормош-көнкүреш шарттарын яҡшыртыу, мәҙәни-рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү мәсьәләләре иғтибар үҙәгенә ҡуйылған. Уларҙы хәл итеүгә булышлыҡ йөҙөнән Башҡортостан менән Силәбе өлкәһенең күп ҡалалары һәм райондары тығыҙ бәйләнеш урынлаштырған. Арғаяш—Сибай, Ҡоншаҡ—Учалы, Ҡуҫа—Балаҡатай, Сосновка—Әбйәлил, Нязепетровск—Мәсетле, Сыбаркүл—Ҡырмыҫҡалы, Магнитогорск—Стәрлетамаҡ, Мейәс—Учалы, Ҡыштым—Бөрйән, Һатҡы—Ҡыйғы һәм башҡа районлар, ҡалалар араһында иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештәр нығый. Силәбелә Башҡортостандың вәкиллеге эшләүе лә ҡыуаныслы күренеш.

Башҡортостан—Силәбе араһында иҡтисади хеҙмәттәшлек көсәйә. 1999 йылда Магнитогорск ҡалаһында «Башҡорт сауҙа йорто» асылды. Силәбе

*Һаумыһығыҙ, кәрҙәштәр!*





10-2001.p65 52 02.11.01, 13:36



*Ҡоролтай делегаттары*
*һәм ҡунаҡтары*

өлкәһенә дизель яғыулығы, бензин, мазут, спирт, төҙөлөш материалдары, ҡорос арҡандар, шәкәр, һыра ебәрелә, Башҡортостанға ҡара металл прокаты, ҡорос торбалар, бульдозерҙар, цемент алына. Быйыл март айында Магнитогорскиҙа уҙғарылған иҡтисад һәм мәҙәниәт көндәре үҙ-ара хеҙмәттәшлекте нығытыуға һәм киңәйтеүгә ҡыҙыҡһыныуҙы тағы ла арттырҙы.

Халыҡ мәғарифы өлкәһе буйынса килешеүҙе бойомға ашырыу өсөн Силәбе өлкәһендә башҡорт мәктәптәрен үҫтереү программаһы эшләнгән. П.И. Суминдың ҡоролтайҙа әйтеүенсә, хәҙер 99 мәктәптә башҡорт теле өйрәнелә, Силәбе ғалимдары 5-6 синыфтар өсөн башҡорт теле дәреслеге нәшер иткән. Арғаяш, Ҡоншаҡ, Уй, Нязепетровск райондары мәктәптәрендә тыуған яҡты өйрәнеү, көнкүреш сәнғәте музейҙары ойошторолған, уларҙа милли мәҙәниәт буйынса материал тупланған. Бындай мәктәптәрҙә рухи яҡтан ҡеҙрәтле, әхлаҡи йәһәттән ныҡ йәштәр тәрбиәләнә.

Х.Х.Ишморатов ҡоролтайҙа һөйләүенсә, Силәбе өлкәһендәге 30063 башҡорт милләтле уҡыусының 8733-ө (29%) башҡорт телен өйрәнә. Арғаяш районында — 49, Ҡоншаҡта — 33, Красноармейскиҙа — 2, Үрге Уфалейҙа — 1, Магнитогорскиҙа 1 мәктәп бар. 222 уҡытыусы башҡорт телен уҡыта. Уларҙың 43-ө юғары, 20-һе махсус урта белемле, 159 уҡытыусының махсус белеме юҡ. Башҡортостандың педагогик колледждарында, училищеларында Силәбе өлкәһенән 34 студент, республика гимназияларында һәм интернаттарында 50 бала уҡый. Туған телде өйрәтеү юғары белемле уҡытыусылар талап итә. Ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү өсөн Силәбе ҡалаһының, Арғаяштың педагогик уҡыу йорттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары әҙерләнә. Башҡортостандың халыҡ мәғарифы идаралыҡтары Силәбе өлкәһендәге башҡорт мәктәптәренә барып, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса асыҡ дәрестәр күрһәтә, балаларҙы милли музыка ҡоралдарында уйнарға, бейергә, йырларға өйрәтеүҙе ойоштора. Республикабыҙҙың халыҡ мәғарифы министрлығы Силәбе өлкәһе уҡытыусыларын һәм уҡыусыларын ғилми-ғәмәли конференцияларға, семинарҙарға, конкурстарға даими саҡыра.

Ләкин туған телде өйрәнеү йәһәтенән хәл ителмәгән мәсьәләләр, ҡаршылыҡтар күп әле. Силәбе, Златоуст, Магнитогорск, Мейәс ҡалаларында һәм ҙур ҡасабаларҙа башҡорт мәктәптәре, кластары юҡ, факультатив дәрестәр ҙә үткәрелмәй. Ҡалаларҙа йәшәгән башҡорт балалары төрлө конкурстарҙан, олимпиадаларҙан һәм башҡорт теленә, сәнғәтенә бәйле сараларҙан ситтә ҡала. Силәбе өлкәһе ҡалаларында йәш быуынға милли-мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү шарттары юҡ. Шуға ла башҡорт балалары, йәштәре урыҫлашыуға дусар. Айырыуса ҡатнаш никахтан тыуғандар. 1997 йылда Силәбе өлкәһендә ҡатнаш никахтар 20 процент тәшкил итһә, башҡорттар араһында атай яғынан ғына — 40 процент. Был башҡорт халҡының йөҙөн юғалтыуға килтерә. Шуға ла милли үҙаңды уятыу, манҡортлоҡтан ҡотолоу юҫығында ал-ял белмәй эшләргә ләҙ эшләргә кәрәк.

Мәҙәни хеҙмәтләндереү Башҡортостан мәҙәниәт министрлығы менән Силәбе өлкәһенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығының килешеүенә ярашлы алып барыла. Мәҙәни-рухи ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереү өлкәһендә күп эштәр ҙә башҡарыла, хәл итәһе мәсьәләләр ҙә байтаҡ. Башҡортостандың драма театрҙары, филармониялары, йыр, бейеү ансамблдәре гастролдәре ҡәрҙәштәребеҙҙең күңеленә хуш. Аудиокассеталар, компакт-дискылар һатыу ойоштороласы, китапханаларға милли әҙәбиәт ебәрелә. Башҡортостандың матбуғат баҫмалары милләттәштәребеҙҙең тормош-йәшәйешен яҡтыртып тора. Яҙыусыларыбыҙ әҙәбиәт көндәре, осрашыуҙар үткәрә. Ошондай осрашыуҙар ҡоролтай алдынан да үтте. Ҡоролтай Башҡарма комитетының 2500-3000 тираж менән «Уралым» гәзите сығып тороуы ҡыуаныслы. «Башҡортостан» гәзитенең Силәбе, Ҡурған өлкәләре буйынса



10-2001.p65 53 02.11.01, 13:36

үҙ хәбәрсеһен булдырыу яҡшы булыр ине.

Силәбе өлкәһе башҡорттарының I ҡоролтайында уҡ өлкә радиоһынан һәм телевидениеһынан даими тапшырыуҙар алып барыу тураһында һүҙ булған. Ләкин өлкә етәкселегенә, Силәбе дәүләт телерадиокомпанияһына мөрәжәғәттәр иғтибарһыҙ ҡалған. 2000 йылда башҡорт, татар телдәрендә ни бары 12 сәғәт эфир ваҡыты менән 32 тапшырыу булған. Быйыл иһә ун-ун биш минутлыҡ Башҡортостан телевидениеһы әҙерләгән тапшырыуҙар ғына күрһәтелгән. Силәбе башҡорттары ер юлдаштары аша Башҡортостан телевидениеһы тапшырыуҙарын даими ҡарарға теләй.

Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Тәлғәт Ғәйнетдин улы Хәйеров башҡа борсоулы хәлдәрҙе лә әсенеп әйтеп үтте. Уларҙың береһе — ҡан ҡәрҙәштәребеҙҙең һәлкәүлеге, моңһоҙлоғо, үҙ мәнфәғәттәре өсөн сая көрәшмәүе, яҡты яҙмышын тәьмин итеү өсөн янмауы, тырышмауы. Был түбәндәге мәғлүмәттәрҙә лә асыҡ күренә. Силәбе өлкәһендә 30,9 процент урыҫтар, 18,9 процент татарҙар аҡыл хеҙмәте менән мәшғүл, башҡорттар иһә — 11,4 процент ҡына. 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса өлкәлә 1000 кешегә 92 юғары белемле кеше тура килһә, башҡорттарҙан 30 кеше генә.

Силәбе өлкәһендә башҡорттар халыҡ һанының 5 процентын тәшкил итһә, юғары уҡыу йорттарында башҡорт йәштәре 1,3 процент ҡына. Интеллектуаль үҫеш кимәле буйынса башҡорттар өс тапҡыр түбән ҡала. Шуға ла улар аҡыл мөхитендә лә аҙ эшләй. Хатта 70 процент башҡорт булған Арғаяш районында етәксе урындарҙа башҡорттар ни бары 10 процент ҡына тәшкил итә. Федераль һәм өлкә кимәлдә дәүләт власы органдарында бер генә башҡорт депутаты ла юҡ. Дәүләт Думаһына, өлкәнең Закондар сығарыу йыйылышына депутат һайлауҙарҙа башҡорт районтары (Арғаяш, Ҡоншаҡ) берләштерелмәгән. Был өлкә власының һәм һайлау комитетының башҡорттарҙың ихтыяждарына ҡолаҡ һалмауы ла. Күпме кәмһетеүгә түҙеп йәшәргә мөмкин? Талап итергә, маҡсаттарға өлгәшергә кәрәк. Шуны бөтә күңеле менән тойоп, Рауил Бикбаев ҡәрҙәштәребеҙгә «Уян халҡым, ҡуҙғал милләтем!» тип шиғри оран һалды. «Берҙәмлектең, татыулыҡтың етмәүе алға китешкә ҡамасаулай. Халыҡ үҙ яҙмышын яҡшыртыуға үҙе тотонмаһа, хәл үҙгәрмәйәсәк. Күңелебеҙ һынмаһын, рухыбыҙ һүрелмәһен!» — тине.

Философия фәндәре докторы Дамир Вәлиев Силәбе өлкәһе составында Арғаяш милли округын тергеҙеү, Силәбе башҡорттарының тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса этнографик үҙәк төҙөү, башҡорт телендә телевизион канал булдырыу, Абдулҡадир Инанға арналған ғилми-ғәмәли конференция үткәреү тәҡдимдәре менән сығыш яһаны. Профессор Ринат Бикбулатов Башҡортостанда Силәбе өлкәһенең вәкиллеген асыу, «Уралым» гәзите мөхәррире Урал Сафиуллин башҡорт филармонияһы, театры булдырыу, башҡортса фильмдар күрһәтеү, урыҫлаштырылған географик атамаларҙы тергеҙеү, бер урамға Әхмәтзәки Вәлиди исемен биреү фекерҙәрен әйтте. Бәләкәй ауылдар хәстәрлектәре, газ



үткәреү, йәшәү шарттарын яҡшыртыу, милли гимназия асыу мәсьәләләре лә күтәрелде. Иткүл ауылынан Фидаил Йөҙләкбаев иҡтисади хәлдәрҙең ауырлығы, эш юҡлығы, булдыҡлы йәштәрҙең ситкә сығып китеүе, эскелектең көсәйеүе, милләттәштәрҙең милләт булараҡ тарҡалыуы тураһында бик әсенеп һөйләне. Силәбе башҡорттары үҙенең тарихын, мәҙәниәтен танып белеүгә, асылына ҡайтыуға мохтаж. Ҡыйынлыҡтарҙы еңергә, ҡот-ырыҫты ҡайтарырға кәрәк.

Силәбе өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайы ҡоролтайҙа күтәрелгән мәсьәләләрҙе туплаған резолюция, Силәбе өлкәһе башҡорттарына һәм халҡына мөрәжәғәттәр ҡабул итте. Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе итеп Камалов Марат Рәфҡәт улы һайланды.



10-2001.p65 54 02.11.01, 13:36